# « Йыйын» йолаһы сценарийы

**Маҡсат**. Йыйын йолаһын пропагандалау һәм тергеҙеү.Уҡыусыларҙа халыҡ ауыҙ - тел ижадына, тарихына, мәҙəниәтенә һөйөү тәрбиәләү.Уҡыусыларҙың һәләттәрен асыу, үҫтереү, милли үҙаңды үҫтереү.

**Йыһазландырыу**: боронғо көнкүреш әйберҙәре ҡуйыу, таҫтамалдар, сигелгән әйберҙәр, балалар өсөн башҡорт халыҡ костюмдары,аш-һыу, ашъяулыҡ.

**Ҡатнашалар** :балалар.

**Йола барышы**

**Алып барыусы:**-Әссәләмәғәләйкүм, хөрмәтле ҡунаҡтар!

**Егет:** -Ата-олатайҙарҙан ҡалған изге йола-
Йыйын йыйып , халыҡ уйнатыу.
Мәргән һүҙ әйтешеп, тарих һөйләп,
Уйнап – бейеп, күңел йыуатыу.

**Ҡыҙ:**
-Беҙҙә йыйын, әйҙә, йыйын!
Һүҙ уйнатып, күңел асырға,
Йырҙар йырлап , бейей- бейей,
Тыпырлатып килтереп баҫырға.

**Алып барыусы:-** Борон-борондан башҡорт иле үҙенең төп законына — йолаға — нигеҙләнеп йәшәгән, үҫешкән. Йола — бер яҡтан әхлаҡи төшөнсә, йәмғиәтте тотоп торған рухи бағана. Шуға ла "Йолалы ил — тәртипле", "Йолаһыҙ ил — болалы" һ.б. мәҡәлдәр йоланың законға торошлолоғон асыҡлай.

**Алып барыусы:-** Нимә ул йыйын? "Йыйын — башҡорттарҙың йәйге байрамы. Ғәҙәттә, ураҡҡа төшөрҙән алдан үткәрелә торған был сараның башы бик боронғо замандарҙан килә. Йыйын бер нисә ауылға уртаҡ булып, меңәрләгән кеше ҡатнашлығында үткән. Урынды шул ауылдарҙың ҡап уртаһында һайлағандар, кесе йома көнө ҡунаҡтар килгән, йома йыйын үткән... Киләһе аҙнала сараны күршеләрҙә ойошторғандар. Йыйындар 15 майҙан 10-15 июлгәсә һуҙылған...

**Алып барыусы:-** Йыйында Ил яҙмышына ҡағылған мөһим мәсьәләләр хәл ителгән: һуғыш — солох, яңы бей һайлау, батырҙарҙы икенсе илгә ярҙамға ебәреү, йәйләү һайлау һ.б. Башҡорттарҙың иң яратҡан байрамы хатта йот йылы ла үткәрелә килгән.

**Алып барыусы:-** Йыйын боронораҡ "Тауға сығыу", "Тау", "Тауға барыу" тип тә аталған. Ҡалҡыуыраҡ урын йәки, ғөмүмән, тауҙарҙы культ дәрәжәһендә ҙурлап, уларҙы тере, ифрат көслө, дәһшәтле рух итеп ҡабул итеүгә бәйле ул.

**Алып барыусы:**-Йыйын – башҡорт халҡында бик боронғо күренеш. Халыҡ йолаларының күрке- йыйын, йыйын күрке – сәсәндәр, йырсылар тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр.Йыйында оҫта йырсылар, ҡурайсылар асыҡланған; мәргәндәр, көрәшселәр көс һынашҡан; етеҙҙәр йүгерешкән.

**Алып барыусы:**-Шул уҡ йыйын эсендә тормоштоң күңелле мәле лә ритуалләшә. Көләү, ирмәк, мәрәкә тылсымын йолалаштырыу (ҡатыҡҡа баш тығып тәңкә алыу, тоҡ кейеп йүгереү, наказ һуғыу һ.б.) атҡарыла.

**Алып барыусы:**-Йыйын үтә торған яланды урап түңәрәк әйләнәләр. Бер километр тирәһе сабып, һыбайлылар бер нисә рәт үтә. Йыйын урыны һәр саҡ

бер урында үткән һәм алдан атап әйтелер булған. Йыйын йолаһы тәрбиәүи әһәмиәткә эйә булған.
**Алып барыусы**:- Йыйынға халыҡ йыйыр өсөн сапҡынсылар ебәрҙек.Һеҙ шул хәбәрҙе алып йыйылдығыҙ.Рәхим итегеҙ! Йыйынды башлайбыҙ. Йыйыныбыҙҙың түрендә булығыҙ!
**Алып барыусы:-**Беҙ бөгөн дуҫлыҡ йыйынына бөрйән ырыуы башҡорттарын саҡырҙыҡ.
**Ҡыҙ: -**Халҡыбыҙҙа матур йолалар бар,
Нигеҙендә ята йомартлыҡ,
Изгелекле халҡым йолалары-
Алтындарҙан алтын ҡомартҡы.
**(Сәхнәгә балалар йүгереп инә.)**
-Киләләр, киләләр!
-Бөрйәндәр килә!
-Ҡунаҡтар киләләр!
**(Балалар сәхнәне йүгереп урап сығалар.)**
**(Хужа тирмәнән сыға.Байҡап тикшергәндән һуң)**
**Хужа: -** Йә, уландар, балалар, әҙерһегеҙме?
-Әҙербеҙ, олатай, әҙербеҙ!
**(Ат тояҡтары тауышы ишетелә. Ҡунаҡтар инә. Хужалар ҡаршы ала.)**
**Хужа: -** Әссәләмәғәләйкүм!
**(Күрешәләр)**
**Ҡунаҡтар:-** Вәғәләйкүмәссәләм!
**Хужа:-** Рәхим итегеҙ!Үтегеҙ! Түрҙән уҙығыҙ!
**(Ҡунаҡтарҙы табын түренә ултырталар, ҡулдарын йыуҙыралар.Бер малай-еҙ тас, икенсеһе- ҡомған, өсөнсөһө- таҫтамал тотоп йөрөй.**
**Хужа:-**Иҫән- һау килеп еттегеҙме, ил- көн тынысмы, ҡунаҡтар?
**Егет:-** Әссәләмәғәләйкүм халыҡтарға,
Майҙан тотҡан йырсыларға, ҡурайсыларға,
Йыйында еңеп сығыр батырҙарға,
Майҙанда уҙып килер арғымаҡҡа!
**Хужа:-** Йәгеҙ, аҡһаҡалдар, иҫән-һау килеп етеүгә бер доға ҡылайыҡ.
**(Доға уҡыйҙар)**

**Хужа:-**Ҡыҙҙар, ҡунаҡтарға ҡымыҙ, бишбармаҡ сығарығыҙ ! Рәхим итегеҙ табынға! **(Ҡымыҙ эсәләр,һыйланалар).**
**Хужа:-**Ҡунаҡтар, атығыҙ- затығыҙ менән таныштырып үтегеҙ.**(Торалар)**
**Бөрйәндәр:** -Ырыуыбыҙ-Бөрйән,
Оранбыҙ-Тарауыл,
Тамғабыҙ-яғылбай,
Ҡошобоҙ-ҡарсыға,
Ағасыбыҙ-ҡарағас.
Эскән һыуыбыҙ Ағиҙел булыр,
Халҡыбыҙ эшсән , моңға бай булыр.
**Юрматылар:-**Үҙебеҙ менән дә таныштырып үтәйек.
-Тыуған ерең ни?
-Башҡортостан.

-Милләтең кем?
-Башҡорт.
-Телең ниндәй?
-Башҡорт теле.
-Ырыуыбыҙ-Юрматы,
-Оранызбыҙ-Айтайлаҡ,
-Тамғабыҙ-һәнәк,
- Ҡошобоҙ-этәлге,
- Ағасыбыҙ-өйәңке,
-Эскән һыуыбыҙ-Егән,
-Торған еребеҙ-Бүжә.
**(Бөрйән ырыуы аҡһаҡалы)**
**Хужа:-**Йыйынға килгән сәсәндәрҙе ,бейеүселәрҙе,йырсыларҙы хөрмәт итәйек.Улар беҙгә үҙҙәренең һөнәрен күрһәтһен! Йыйынды башлайыҡ.
**Ҡунаҡ**:-Ярыш шарттарын ни төрлө ҡуябыҙ?
**Хужа:-**Йырсы оҙон көйҙө дөрөҫ йырлаһа,ҡонан уныҡы!
**Егет:-**Хәйерле сәғәттә,изге нийәттә!Ҡайһы ырыуҙың һандуғаһы башлай?
**(Ҡарана)**
**Бөрйәндәр:-**Гөлнәзирә килен йырлаһын!
**Балалар:-** Йырлаһын! Йырлаһын!
**(„Һандуғас”)**
**Ике яҡтан да дәртләндереү тауыштары:**
-Афарин!Һандуғастай тауышы!
-Һынатманы!
**Хужа:-**Йәгеҙ әле,балалар,үҙебеҙҙе күрһәтәйек.Кемегеҙ йыр бәйгеһендә үҙен һынап ҡарай?Бүләккә-тай!
**Балалар:-**Айһылыу апай йырлаһын!
-Айһылыу апай,йырла!
**(„…”)**
-Эх,үҙебеҙҙең ҡыҙ.Сылтырап аҡҡан шишмә тауышы!
**Сәсәндәр ярышы:-** Йәмәғәт!Рөхсәт булһа, сәсәндәр ярышы үткәреп,һүҙ көрәштереп ,ҡобайыр әйтешеп алайыҡ.
**Хужа:-**Беҙҙең дә сәсәндәр барсы.
-Йә,Сәлимә килен менән Көнһылыу ҡыҙым,ҡобайыр әйтегеҙ әле һеҙ ҙә**!(Әйтеш)**
**Ҡунаҡ:-**Халыҡтың йыры бар ерҙә бейеүе лә бар.
**Хужа:-**Йәмәғәт!Бейеүселәр бәйгеһен башлайбыҙ!Әйҙәгеҙ,бейеүселәр,бәйгегә рәхим итегеҙ.**(Бейеү)**
**Бөрйән яғында:-**Һай,һылыуым,өҙҙөрөп тә баҫтың.
**Ҡунаҡ яғынан:**
**-**Баҫ,баҫ,баҫ әле ,
Һығылһын иҙәндәре ,
Һинән оҫта бейегәнде,
Юҡ әле күргәндәре.
**Халыҡ:-**Хаҡ һүҙҙәр! Рәхмәт бейеүсегә!
**Хужа:-**Ҡыйыуыраҡ булһын.Кем бәйгене дауам итә?Бүләккә-дүнән.
**(Бейеү)**

(Халыҡ ,ил ҡарттары йөплəй,маҡтай)
**Халыҡ:-**Бигерəк матур бейенең!!Һай ,үҙебеҙең килен .
**Хужа:-**Йырсылар,бейеүселəр,ҡобайырсылар бəйгеһе тамам!Киләһе бəйге-көрəш.Ырыу батырҙары майҙанға рəхим итегеҙ Еңеүсегə-тəкə!
**(2-3 пар көрəшə)**
**-Дəртлəндереү.**
Хужа:-Ырыу башлыҡтары,аҡһаҡалдар менəн кəңəш ҡорорбоҙ.Ə һеҙ,ырыуҙаштарым,ҡунаҡтар,уйнағыҙ,көлөгөҙ,ырыу батырын билдəлəгеҙ,етеҙҙəрҙе асыҡлағыҙ,күңел асығыҙ.